**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципальное казенное учреждение**

**Салаватский районный отдел образования**

**Муниципальное общеобразовательное учреждение**

**средняя общеобразовательная школа с. Алькино**

**муниципального района Салаватский район**

**Республики Башкортостан**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО | Зам директора по УВР | Директор |
| Ямалетдинова Г.Д. | Закирова Л.Ф. | Абдуллина Г.А. |
| Протокол №1 от «28» 08 2024 г. | Протокол №1 от «28» 08 2024 г. | Приказ №206 от «28» 08 2024 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

(ID 6258924)

**учебного предмета Литературное чтение на родном (башкирском) языке**

для обучающихся 3 классов

**с. Алькино 2024**

**Аңлатмалы яҙыу**

Эш программаһы түбәндәге норматив-хоҡуҡ документтарына нигеҙләнеп төҙөлдө:

1. Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында” Федераль законы 29.12.2012 №273-ФЗ;

2. ”Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы 25 октябрь 1991 №1807-1 (24.07.98, 11.12.2002 йыл үҙгәртелгән);

3. Башҡортостан Республикаһының ”Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһында” законы 01.07.2013 №696-З;

4. ”Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында” законы 15.02.1999йыл №216-З

5.Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығының №1897 бойороғо менән 17.12.2010 йылда раҫланған Дәүләт белем биреү стандарттарының Федераль компоненты (01.02.2011йыл №19644 РФ Мәғариф министрлығы)

6. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №1644 бойороғо менән 29.12.2014 йылда раҫланған Дәүләт белем биреү стандарттарының Федераль компоненты, Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының 17.12.2010 йыл №1897 бойороғо менән үҙгәртелгән (РФ мәғариф министрлығы 06.02.2015 №35915)

7.Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №1577 бойороғо менән 31.12.2015 йылда раҫланған Дәүләт белем биреү стандарттарының Федераль компоненты, Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының 06.10.2009 йыл №373 бойороғо менән үҙгәртелгән .

8. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №1047 бойороғо менән 05.09.2013 йылда “Башланғыс дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын Федераль дәүләт стандарттарын тормошҡа ашырыу маҡсатында ҡулланыласаҡ дәреслектәр исемлеген раҫлау”(үҙгәртелгән һәм тултырылған 08.12.2014, 14.08.2015йыл)

9. . Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №253 бойороғо менән 31.03.2014 йылда “Башланғыс дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын Федераль дәүләт стандарттарын тормошҡа ашырыу маҡсатында ҡулланыласаҡ дәреслектәр исемлеген раҫлау”.

10.Дәүләт сәйәси Департамент хаты «Федераль дәреслектәр исемлеге» № 08-546 29.04.2014 йыл

11.Башланғыс һәм төп белем биреү мәктәптәренең яҡынса программалары.

12.Башланғыс дөйөм белем биреү буйынса Федераль дәүләт стандарттарына ярашлы 1-4 кластарҙа яҡынса уҡыу планы

13.Дәреслектәр: Әҙәби уҡыу,2 киҫәктә, 2017 й.,Эш дәфтәре,2киҫәктә,20017й. Авторы:Ф.Ш.Сынбулатова, Г.Ә.Вәлиева

Предмет буйынса белем биреүҙең йөкмәткеһе.

Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлегенең төрҙәре.

*Тыңлау, тыңлау һәм аңлау*

Телдән һөйләнгән телмәрҙе тыңлау һәм ҡабул итеү. Шул уҡ ваҡытта тыңлау һәм мәғәнәһенә төшөнә барыу. Тыңлау һам аңлай алыу күнекмәләре үҙ аллы айырым ғына формалашмай. Ул һөйләү, яҙыу, уҡыу күнекмәләре менән аралашып, үрелеп бара.

*Уҡыу.*

**Ҡысҡырып уҡыу**. Уҡыу күнекмәһенә өйрәткәндә ҡысҡырып уҡыу бик ҙур әһәмиәткә эйә. Тиҙ, дөрөҫ, йүгерек, аңлы, тасуири уҡыу күнекмәләрен барлыҡҡа килә. Уҡығанда интонацияның йөкмәткегә тура килеүен күҙәтеп, орфоэпик нормаларҙан тайпылмау. Һөйләмдәрҙе, тыныш билдәләренә иғтибар итеп, интонация менән уҡыу. Төрлө типтағы һәм төрҙәге текстарҙың мәғәнәүи үҙенсәлеген аңлау һәм уларҙың мәғәнәһен интонация ярҙамында асып биреү. Башҡорт теленең әҙәби тел нормаларын күҙәтеп, һүҙ һәм фраза баҫымына иғтибар итеп уҡыу.

**Эстән уҡыу.** Телмәр органдарының ҡатмарлығынан тыш, һүҙҙәрҙе әйтмәйенсә, күҙ йөрөтөп, текстың йөкмәткеһен аңлап уҡыу. Был уҡыуҙың тиҙлеген яҡшырта, балала уҡырға ҡарата яуаплылыҡ тойғоһон арттыра, үҙ аллы уҡырға күнектерә.

Эстән уҡығанда уҡыусы текстың мәғәнәһен, төп фекерен, уларҙы уҡыу төрҙәрен (өйрәнеү, таныштырыу, һайлау) билдәләй. Текстан кәрәкле мәғлүмәтте таба белеү күнекмәләрен үҙләштерә.

**Төрлө текстар менән эш**

Төрлө төрҙәге текстар тураһында дөйөм мәғлүмәт биреү.

Әҙәби, фәнни-популяр, өйрәтеү текстарының үҙенсәлектәрен, айырмалығын күрһәтеү, сағыштырыу. Текстың маҡсатын билдәләү, фольклор – халыҡ ижады өлгөләре менән таныштырыу, мәғлүмәт биреү.

Текстарҙың темаһын, төп фекерен, структураһын билдәләү, тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү. Төрлө мәғлүмәт менән эшләү күнекмәләрен булдырыу.

Коллектив фекер алышыуҙа ҡатнашыу, тексты файҙаланып һорауҙарға яуап биреү, тема буйынса сығыш яһау, башҡаларҙың сығышын тыңлау, өҫтәлмә һәм күргәҙмә материалдарҙы, һүрәттәрҙе әңгәмә барышында дөрөҫ ҡулланыу.

**Библиографик культура** – китап сәнғәтенең үҙенсәлекле бер төрө. Китап – белеем сығанағы. Рәсәйҙә, Башҡортостанда беренсе китап сығарыусы нәшриәттәр, китап төрҙәре тураһында дөйөм белем биреү. Китап элементтары менән таныштырыу: йөкмәтке, иллюстрация.

Китаптарҙы тәғәйенләнгән исемлектән картотека буйынса һайлап алыу. Уҡыусының үҙ йәшенә тура килгән һүҙлектәр һәм белешмә материалдарҙы ҡуллана белеүе.

**Әҙәби әҫәрҙең тексы өҫтөндә эш**

Әҙәби әҫәрҙең исеме йөкмәткеһенә тура килеүҙе аңлау ,уҡытыусы яҙамында әҙәби текстың үҙенсәлектәрен билдәләү. Фольклорҙа дөйөм кешелек, әхлаҡ ҡанундары тупланыуын аңлау.

Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен, геройҙарырың үҙ-үҙен тотошон, уларҙың эшләгән эштәрен, ҡылыҡтарын әхлаҡи-мораль күҙлектән анализлау. Изге һәм оло тойғоно – ил тойғоһон төшөнөү. Әҫәрҙа илһөйәрлек темаларының сағылыш батыуын билдәләү.

Әҫәрҙәге геройҙарға телдең тасуирлау сараларын ҡулланып характеристика биреү. Тик шуға хас әйтемдәрҙе, һүҙҙәрҙе таба белеү. Геройҙың портретын, характерын ҡылған эштәре, телмәре аша билдәләү.

Әҙәби тексты һөйләүҙең төрлө төрҙәрен – тулы, һайлап, ҡыҫҡартып һөйләүҙе үҙләштереү.

**Тулы һөйләү** – уҡыған тексты ентекләп һөйләү ул. Уҡылғандың төп фекерен билдәләү, план төҙөү күнекмәләрен булдырыу. Ваҡиға урынын һүрәтләү - яҙыу. Төрлө әҫәрҙәрҙәге эпизодтарҙы эмоциональ биҙәү, геройҙарҙы ҡылыҡтары буйынса һайлап алыу һәм сағыштырыу.

**Өйрәтеү, фәнни – популяр, әҙәби һәм башҡа текстар менән эшләү**

Әҫәрҙең йөкмәткеһе исеменә тап килеүен билдәләү, үҙенсәлеген күҙәтеү. Легендалар, риүәйәттәр, ҡобайырҙар, дин тураһындағы текстарҙың айырмалыҡтарына төшөнөү. Текстарҙың төп фекерҙәрен билдәләү, өлөштәргә бүлеү, темалар билдәләү. Төп һәм терәк һүҙҙәр менән эшләү. Тексты һөйләү алгоритмы, схемаларға таянып һөйләп ҡарау.

**Һөйләү** (аралашыу мәҙәниәте). Һөйләү, тексты яҙыу кеүек үк, телмәр эшмәкәрлегенең продуктив формаһына инә. Улар икеһе лә фекерләү процесын барлыҡҡа килтереп, билдәле

йөкмәтке, текст, информация барлыҡҡа килтереп, уны башҡаларға тапшырыу функцияһын үтәйҙәр.

**Диалог төҙөү**. Диалог - телмәрҙең бер төрө. Диалог ике йәки бер нисә кеше араһында ҡорола. Әңгәмә ваҡытында башҡаларҙың да хәбәрҙәренә ҡолаҡ һалыу, һөйләү этикаһын иҫтә тотоу мөһим шарттарҙың береһе.

**Монолог** – берәү телмәр алып бара, башҡалар тыңлаусы ролен башҡара. Һөйләү, информацияны тапшырыу процессы әңгәмәгә ҡарағанда киңерәк, тулыраҡ була. Фәнни-популяр, өйрәтеү, текст үҙенсәлектәренә иғтибар итеп, йөкмәткеһен башҡаларға еткереү. Әйтергә теләгәндәреңде иҫәпкә алып, үҙ аллы план төҙөү.

**Яҙыу** – үҙең ишеткән, күргән, уҡыған, кисергән хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле һәм матур итеп яҙа белеү.

**Китап уҡыу даирәһе**

Башланғыс мәктәп уҡыусылары үҙләштерә алырлыҡ Рәсәй, Башҡортостан халыҡтарының ауыҙ-тел ижады әҫәрҙә; сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәре менән танышыу. Балаларға тәҡдим ителгән төп темалар: Тыуған ил, йәнлектәр тураһында әҫәрҙәр, юмористик хикәйәләр, йәмғиәтте, тормош-көнкүреште, яманлыҡ-яуызлыҡ, мәрхәмәтлелек кеүек сифаттарҙы сағылдырған әҫәрҙәр.

**Әҙәби – теоретик белем биреү (практик өйрәтеү)**

Уҡытыусы ярҙамында текстағы тасуирлау сараларын әһәмиәтен билдәләү. Әҫәр геройының портретын, ҡылығын тасуирлау, телмәре, уйҙары тураһында төшөнсә биреү, авторҙың геройға ҡарата мөнәсәбәтен билдәләү. Һөйләү төрҙәренең композицион үҙенсәлектәре тураһында дөйөм төшөнсә биреү

*Хикәйәләү* – теге йәки был ваҡиға тур-да хәбәр итеү, һөйләү. *Һүрәтләү* – пейзажды, портреты, интерьерҙы йәки кешенең тышҡы сифаттарың эҙмә-эҙ тасуирлау. *Хөкөмләү* – уҡыусыларҙың билдәле бер кеше ҡылығы, эше буйынса фекер йөрөтөүен, үҙ фекерен иҫбатлауын, һығымта яһауын талап итә торған монологик телмәр.

Шиғри һәм проза әҫәрҙәрен таныу, айырыу, шиғри әҫәрҙең үҙенсәлектәрен билдәләү. Фольклор һәм автор ижад иткән әҫәрҙәрҙе айыра белеү һәләтенә эйә булыу.

Әҫәрҙәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, сәхнәләштереү; телдән һүрәтләү, текстар өҫтөндә эшләгәндә төрлө эш алымдары ҡулланыу ысулдары менән таныштырыу. Хәл-ваҡиғаларҙың тәртибен, эш этабын, башҡарыуҙың эҙмә-эҙлеклелеген тәьмин итеү; инша элементтары менән изложение яҙыу күнекмәләрен булдырыу. Уҡыған әҫәргә оҡшатып, бирелгән иллюстрациялар буйынса һәм үҙеңдең тәжрибәнә нигеҙләнеп текст ижад итергә өлгәшеү.

**Укытыу һөҙөмтәһендә** башланғыс мәктәптә балала артабан белем алырға әҙерлек, кәрәкле әҙәби үҫеш кимәле булдырыуға теләк уянасаҡ. Был түбәндәге күнекмәләрҙе булдырыуҙы күҙаллай:

- тирә-йүнде өйрәнгәндә туған тел дәресенең тотҡан урынын һәм ролен төшөнөү, уҡыуҙың мәҙәниәтле кеше тәрбиәләүҙәге ролен аңлау, шәхси сифаттарҙы һәм социаль ҡиммәттәрҙе тәрбиәләү;
- әҙәбиәттең дөйөм кешелек сифаттары тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен аңлау
- әҙәби текстар өҫтөндә эстетика һәм әхлаҡ күҙлегенән сығып эш итеү. Әҙәбиәттең сәнғәттең бер төрө икәненә төшөнөү, аңлау;
- әҙәби жанрҙы билдәләү, геройға характеристика биреү өсөн анализлау, сағыштырыу алымдарын ҡулланыу; тексты һөйләй белеү күнекмәләренә эйә булыу;

- үҙеңә кәрәкле информацияны әҙәби, фәнни-популяр, өйрәтеү текстарынан таба белеү;
- энциклопедик, белешмә баҫмалар менән эшләү күнекмәләренә эйә булыу.

«Әҙәби уҡыу» предметының эш программаһы

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр**

Бала үҙ телендә һөйләшә, фекер йөрөтә, уның аша кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең иң ҡатмарлы донъяһына үтеп инә, тәбиғәт, йәмғиәт һәм сәйәси күренештәрҙе танып белә, улар хаҡында тәүге төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Туған тел балаға туранан-тура йоғонто яһай: туған телдә әйтелгән һүҙ уны шатландыра, көйөндөрә һәм төрлө бәхәстәргә тарта ала. Туған телде өйрәтеү уҡыусының үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтен, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереүҙе, байытыуҙы, камиллаштырыуҙы, баланың үҙен шәхес итеп үҫтереүҙе, формалаштырыуҙы күҙаллай.

Мәктәптә туған тел махсус предмет булараҡ өйрәнелә. Ә башланғыс мәктәптә иһә айырыуса әһәмиәтле урын алып тора. Сөнки башланғыс класс укыусылары туған тел аша ысынбарлыҡты танып белә, кешеләр араһындағы, йәмғәттәге мөнәсәбәттәрҙе, үҙен уратып алған донъяны өйрәнә, шәхес булараҡ үҫешә. Фәҡәт үҙ телең генә ата-бабаларыңдың үткәнен белергә, киләсәккә өмөт-хыялдарын яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Ошоларға ирешмәйенсә тороп, телеңдең, милләтеңдең киләсәген күҙаллауы мөмкин түгелдер. Шуға ла туған телде бөтә нескәлектәре менән өйрәнеү, белеү мотлаҡ.

Башланғыс мәктәптә туған телде уҡытыу юғары кластарҙа өйрәнеләсәк тел һәм әҙәбиәт дәрестәренә әҙерлек этабы булып тора. Әгәр уҡыусы туған тел дәрестәрендә башланғыс класта уҡ яҡшы һөҙөмтәләргә ирешһә, уға өлкән кластарҙа башҡа предметтарҙы уңышлы үҙләштереү өсөн ҙур мөмкинселектәр тыуа. Шуға ла башланғыс мәктәптә туған тел дәрестәре алдында ҡуйылған мөһим шарттар – уҡыусыларҙы тормош менән таныштырып, унда үҙ урынын табырға өйрәтеү; мәктәптә уҡытылған туғандаш әҙәбиәттәр менән сағыштырып, башҡа фәндәр, сәнғәт төрҙәренә бәйле алып барыу; һәр көн һайын арта барған фәнни мәғлүмәтте еткереү; әҙәбиәт һәм сәнғәттең етеҙ үҫеше аша уҡыусыларҙың танып белеү һәләтлектәрен үҫтереү; уларҙың үҙ аллы белем алыуына, әҙәби китап уҡыуына, уҡылғанды баһалай белеүенә булышлыҡ итеү һәм ижади эшмәкәрлектәрен әүҙемләштереү бурысы тора. Шулай уҡ йәмғиәт алдында яуаплылыҡ тойған һәм рухи яҡтан ныҡлы булған интеллектуаль шәхес тәрбиәләү бурысы ла мөһим.

Юғарыла аталған бурыстарҙы хәл итеү өсөн тейешле шарттар булдырыу зарур. Иң төп шарттарҙың береһе – телде өйрәнеү өсөн мөмкинселектәр тыуҙырыу. Шуға күрә балалаларҙы тел ғилеменә өйрәтеү башланғыс кластан маҡсатлы рәүештә алып барыла. Дәүләт теле булған рус һәм халыҡ-ара аралашыу теле булған инглиз телдәрен өйрәнеү, ҡағиҙә булараҡ, туған телгә нигеҙләнеп атҡарыла.

Башланғыс мәктәптә «Әҙәби уҡыу” дәрестәрен өйрәнеү түбәндәге **маҡсаттарҙы** тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән:

- башланғыс мәктәп системаһының төп нигеҙен тәшкил иткән дөрөҫ, йүгерек һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, үҙ аллы аңлап уҡыу күнекмәләрен булдырыу; танып белеү даирәһен формалаштырыу; телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен камиллаштырыу;

- уҡыусыларҙың танып белеү һәм ижади эшмәкәрлектәрен үҫтереү, әҙәби әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән тормош күренештәрен, ваҡиғаларҙы һәм образдарҙы ысын күңелдән ҡабул итеүгә булышлыҡ итеү;
- төрлө жанр әҫәрҙәре менән эшләү күнекмәләрен булдырыу; әҙәби әҫәрҙәр аша уҡыусыларҙа намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ, шәфҡәтлелек, әүҙемлек кеүек юғары әхлаҡи сифаттарҙы тәрбиәләү;
- туғандаш, Рәсәйҙең башҡа халыҡтарының әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә, сәнғәтенә ихтирам тойғоһо тәрбиәләү; уҡыусыларҙы китап уҡыуға йәлеп итеү һәм уҡыу эшмәкәрлеге үҙ аллы белем туплауҙа иң төп сара икәнен төшөнгән белемле уҡыусылар тәрбиәләү;
- бергә уҡыу компетентлығын уҡыу техникаһын үҙләштереү; уҡылған һәм тыңланған әҫәҙәрҙе аңлау, китапты таныу, үҙ аллы һайлау күнекмәләренә эйә булырға өйрәтеү, китап уҡыуға ныҡлы ҡыҙыҡһыныу арттырыу.

Программа башланғыс мәктәп уҡыусыларына китаптың төрлө мәғлүмәт сығанағы булыуы тураһында төшөнсә бирә.

1. **Мәҙәниәтле уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, тексты аңлау, китапҡа һәм китап уҡыуға ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү**

Был мәсьәләне хәл итеү уҡыу күнекмәләрен формалаштырыуҙы( уҡыу процесына ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы, төрлө маҡсатты күҙ уңында тотҡан әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыуға теләк булдырыуҙы) күҙаллай. Туған тел предметының йөкмәткеһен үҙләштереү аша уҡыусылар тексты аңлап уҡыу, төрлө мәғлүмәт менән эшләү, кәрәк булғанын таба белеү күнекмәләренә эйә була.

2. **Һөйләү эшмәкәрлегенә, яҙыу-аралашыу культураһына эйә булырға өйрәтеү**

Был йүнәлеш китаптағы төрлө маҡсатты күҙ уңында тотҡан текстар өҫтөндә эшләүҙе, уларҙы айыра алыуҙы, тирә-йүн тураһындағы белемдәрен арттырыуҙы күҙ уңында тота. Уҡыусылар дәрес барышында телмәрҙең диалог һәм монолог формаһын төҙөргә өйрәнәләр, әҙәби әҫәрҙә һүрәтләнгән донъяуи күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы һәм образдарҙы ихлас ҡабул итеп, дәреслектә бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белергә, һүҙлектәрҙән мәғлүмәт табырға, энциклопедиялар менән дөрөҫ эш итергә өйрәнәләр; ишеткән, уҡыған тема буйынса үҙ фекерҙәрен әйтеп бирергә, һығымта яһарға өйрәнәләр.

3. **Әҙәби әҫәрҙәрҙәге хәл-ваҡиғаларға ҡарата әхлаҡи-эстетик тойғолар һәм зауыҡ тәрбиәләү.**

Был йүнәлештәге мәсьәләрҙе тормошҡа ашырыу - әҙәби әҫәрҙе сәнғәттең үҙенсәлекле айырым бер төрө итеп ҡабул иттереү; әҫәрҙең әҙәби ҡиммәтен аңларға; тасуирлау сараларын танып белергә өйрәтеү ул.

Шулай уҡ әҙәби әҫәрҙе сәнғәттең башҡа төрҙәре ( һынлы сәнғәт, музыка) менән сағыштырыу, оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын табыу; уҡылған әҫәрҙәр ярҙамында үҙең дә хикәйә яҙып ҡарау.

4. **Әхлаҡи ҡиммәттәрҙе формалаштырыу, әҙәбиәт менән танышыуҙан йәм табырға, әҙәби әҫәрҙең рухи асылын аңларға өйрәтеү**

Әҙәби әҫәрҙең үҙенсәлеген, уның әхлаҡи асылын, шәхесте тәрбиәләү маҡсатынан сығып аңлау мөһим урын алып тора. Әҙәби әҫәрҙе уҡыған бала тирә-йүнде уратып алған төп әхлаҡи-этик ҡиммәттәрҙе үҙләштерә, геройҙарҙың ыңғай һәм кире эштәре менән таныша, баһалай, анализлай, әҫәрҙе эмоциональ ҡабул итеү һөҙөмтәһендә үҙендә ыңғай сифаттар тәрбиәләргә тырыша.

**5.«Әҙәби уҡыу» предметы йөкмәткеһендә тәрбиәүи йүнәлеш ҡиммәттәре**

Башланғыс мәктәптә уҡыу предметы булараҡ туған тел дәрестәре белем биреүгә генә түгел, ә тәрбиәүи ҡиммәттәргә лә ҙур әһәмиәт бирә. Туған тел дәрестәрендә уҡыусылар **тәбиғәтте күҙәтеү, һаҡлау, шулай уҡ, әҙәп, әхлаҡ, мәҙәниәтле аралашыу** мәсьәләләренә бағышланған әҫәрҙәр менән танышалар.

Төрлө әҙәби әҫәрҙәрҙе үкыу барышында уҡыусыларҙа белем алыу менән бер рәттән **тәбиғәткә һөйөү,һаҡсыл** ҡараш тәрбиәләнә.Кешеләрҙең уй-фекерҙәрен, **ҡылыҡтарын аңлау**,үҙҙәрендә лә **ыңғай сифаттарҙы үҫтереү** хуплана.

Туған тел дәрестәре уҡыусыларҙы үҙ халҡының **эстетик-әхлаҡи ҡиммәттәре** менән таныштырыуҙы һәм **юғары әхлаҡи һыҙаттарҙы: матурлыкты күрә,баһалай белеү,кешелектең һәм үҙ милләтеңдең тәрбиәһенә тап килерҙәй ыңғай сифаттарҙы** тәрбиәләүҙе күҙаллай.

Туған тел дәрестәрендә уҡыу техникаһы, уҡыу сифаты, аңлап уҡыу күнекмәләрен булдырыу дауам итә. Әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡығандан һуң анализлап **уҡыусы яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, дөрөҫлөк, ғәҙеллек, тоғролоҡ, дуҫлыҡ** тураһында уйлана.

Әҙәби белем биреү сиктәрендә тормошҡа ашырылған рухи-әхлаҡи тәрбиә һәм белем биреү уҡыусыла **Тыуған илгә, кешеләргә ҡарата булған ыңғай шәхси сифаттарҙы** барлыҡҡа килтерә, формалаштыра.

Башланғыс класс уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын аныҡ ҡуя.

**Шәхси үҫеш кимәле**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәтәренә төшөнгән, уны һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

Был йүнәлештә башланғыс мәктәп уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш өсөн кәрәклеген аңлатырға, китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙеңде һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итергә, тарихи-мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекереңде булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә.

**Метапредмет кимәле**

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

Предмет – ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:

- әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәкәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау һәм текстың төп фекерен асыҡлау;
- үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;
- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;
- йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;
- аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;
- төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

**Предмет кимәле**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметы өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:
- компетенлы уҡыуҙы формалаштырыу;
- уҡыу техникаһын үҙләштереү;
- уҡылған йәки тыңланған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;
- интепретацияның төп элементтарын үҙләштереү;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;
- ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;
- һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;
- үҙеңде ижади эшмәкрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;
- сюжет элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;
- шиғырҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

**ӘҘӘБИ УҠЫУ. ТЕМАТИК ПЛАН 3 КЛАСС**

| № | темалар | сәғ.һаны |
|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы | 1 |
| 2 | Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар | 30 |
| 3 | Тәңкә-тәнкә ҡарҙар яуа. | 8 |
| 4 | Йортом,илем, халҡым, киләсәгем… | 13 |
| 5 | Әкиәт уҡырға яратам… | 9 |
| 6 | Илде иңләп йәмле яҙ килә… | 9 |

# Календарь планлаштырыу

| № | Дәрес темаһы | Сә-ғәт һаны | Дата | | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План | Факт | |
| 1. | Белем байрамы | 1 | 2.09 | | |
| 2. | Йәй бит был, йәй!.Сабир Шарипов. | 1 | 5.09 | | |
| 3. | Бүленгән - бөлөр.Н.Мусин. | 1 | 9.09 | | |
| 4. | Сәскә телен белеүсе Сәлим. Ф. Туғыҙбаева. | 1 | 12.09 | | |
| 5. | Кем ғәйепле? Ф.Фәтҡуллина. | 1 | 16.09 | | |
| 6. | Баҫыу һаҡсылары.Х.Хәйретдинов. | 1 | 19.09 | | |
| 7. | Һарыбай.Раил Байбулатов. | 1 | 23.09 | | |
| 8. | Һунарсы мажаралары.Ж. Кейекбаев. | 1 | 26.09 | | |
| 9. | Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә.Көҙ. | 1 | 30.09 | | |
| 10. | Дуҫтар көҙ ҡаршылай.Д.Талхина. | 1 | 3.10 | | |
| 11. | Сәйәхәт.Ф.Рәхимғолова. | 1 | 7.10 | | |
| 12. | Шыршыбикә.Р.Низамов. | 1 | 10.10 | | |
| 13. | Шиғырҙар. | 1 | 14.10 | | |
| 14. | Ҡоштар йыйылышы.Ғ.Ғәлиев. | 1 | 17.10 | | |
| 15. | Йомарт уңыш.А.Игебаев. | 1 | 21.10 | | |
| 16. | Тикшереү эше. Йомғаҡлау. | | 24.10 | | |
| 17. | Әҙәп төбө –матур ғәҙәт.Ололар кәңәше. | 1 | 4.11 | | |
| 18. | Тырышҡан- ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.Р.Ханнанов. | 1 | 7.11 | | |
| 19. | Тартай теленән табыр.Р.Ханнанов. | 1 | 11.11 | | |
| 20. | Кешегә соҡор ҡаҙыма,үҙең төшөрһөң. Р.Ханнанов | 1 | 14.11 | | |
| 21. | Кәңәшле эш тарҡалмаҫ.Р.Ҡотошов. | 1 | 18.11 | | |
| 22. | Дуҫтар һәм дошмандар.К.Мәргән. | 1 | 21.11 | | |
| 23. | Өҙөлгән сәскәләр. Ҡ.Даян | 1 | 25.11 | | |
| 24. | Кем алданды? Р.Солтангәрәев. | 1 | 28.11 | | |
| 25. | Ҡайын.А.Ғирфанов. | 1 | 2.12 | | |
| 26. | Лайыҡлы бүләк.Б.Байымов. | 1 | 5.12 | | |
| 27. | Аҡтырнаҡ.Н.Игеҙйәнова. | 1 | 9.12 | | |
| 28. | Берлектә- ҙур байлыҡ. И Ғимранов.Нәҫер. | 1 | 12.12 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 29. | Сәтләүек ҡыҙ.Й.Ильясова. | 1 | 16.12 | | |
| 30. | Дуҫлыҡ һуҡмағы.Г.Скребицкий. | 1 | 17.12 | | |
| 31. | Йомғаҡлау дәресе.Тикшереү эше. | 1 | 23.12 | | |
| 32. | Ҡыш.Н.Нәжми.Ҡышҡы юлда.Ш.Бабич. | 1 | 26.12 | | |
| 33. | Һунарға барғанда.М.Садиҡова. | 1 | 13.01 | | |
| 34. | Йәйәүле буран.Р.Хәйри. | 1 | 16.01 | | |
| 35. | Биҙәктәрҙе кем яһаған? С.Сурина. | 1 | 20.01 | | |
| 36. | Урман ситендә.Ш.Биҡҡол. | 1 | 23.01 | | |
| 37. | Ни өсөн айыу ҡыш көнө йоҡлай ? С.Сурина. | 1 | 27.01 | | |
| 38. | Ҡыш ниңә ҡырыҫ холоҡло? Г.Шафиҡова. | 1 | 30.01 | | |
| 39. | Йомғаҡлау дәресе.Тикшереү эше. | 1 | 3.02 | | |
| 40. | Ватан.Н.Нәжми. | 1 | 6.02 | | |
| 41. | Изге аманат.Р.Ханнанов. | 1 | 10.02 | | |
| 42. | Тыуған ил ҡайҙан башлана? Ғ.Хөсәйенов. | 1 | 13.02 | | |
| 43. | Башҡортостан. Ғ.Хөсәйенов | 1 | 17.02 | | |
| 44. | Самат олатай ҡайындары. Үзбәк Сирбаев. | 1 | 20.02 | | |
| 45. | Урал.Ҡобайыр. | 1 | 24.02 | | |
| 46. | Баш ҡалабыҙ - Өфө. Р.Бикбаев. | 1 | 27.02 | | |
| 47. | Ҡурай. Булат Рафиҡов. | 1 | 3.03 | | |
| 48. | Бабсаҡ бей ырыуы.Т.Шаһманов. | 1 | 6.03 | | |
| 49. | Салауатҡа –салауат.Т.Сәғитов. | 1 | 10.03 | | |
| 50. | Батырға үлем юҡ. С. Әлибай. | 1 | 13.03 | | |
| 51. | Ере байҙың –теле бай.С.Сурина. | 1 | 17.03 | | |
| 52. | Тикшереү эше.Йомғаҡлау. | 1 | 20.03 | | |
| 53. | Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы.В.Исхаҡов. | 1 | 24.03 | | |
| 54. | Икмәк көсө.А Шәйәхмәтова. | 1 | 27.03 | | |
| 55. | Ҡошҡа әйләнгән әбей.<br>Васыят. | 1 | 7.04 | | |
| 56. | Урал иле.А.Йәғәфәрова. | 1 | 10.04 | | |
| 57. | Урал батыр. | 2 | 14.04<br>17.04 | | |
| 58. | Алпамыша батыр. | 1 | 21.04 | | |
| 59. | Бойҙай бөртөгө. | 1 | 24.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 60. | Юлдыбай һунарсы. | 1 | 23.04 | | |
| 61. | Тикшереү эше. | 1 | 28.04 | | |
| 62. | Яҙ етте. М.Ғафури. | 1 | 1.05 | | |
| 63. | Илде иңләп йәмле яҙ килә… | 1 | 5.05 | | |
| 64. | Яҙ ҡайҙан килде? Р.Сәғәҙиев. | 1 | 12.05 | | |
| 65. | Тамсы менән Тамсыҡай. Ә.Хәмәтдинова. | 1 | 15.05 | | |
| 66. | Бөйөк Еңеү. Ғ.Рамазанов. | 1 | 19.05 | | |
| 67. | Тикшереү эше. | 1 | 22.05 | | |
| 68. | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | 26.05 | | |